# «Ғаиләлә уйнаған уйындар»

Дүртенсе һәм бишенсе йәштәге балалар менән ролле уйындарға төп иғтибар  бирергә кәрәк.

Дүртенсе йәштәге балаларҙың уйындары ҙур үҫеш кисерә: уларҙың темаһы киңәйә, уйындың мөмкинселеге асығыраҡ күренә, уны тормошҡа ашырыуҙа ныҡышмалылыҡ үҫешә. Ғәҙәттә, уйын башланыуға тиклем бүленә, әммә балаларға ролдәрҙе үҙ аллы бүлешергә ауырыраҡ, шуға күрә өлкәндәр яғынан уйындар менән идара итеү үҙенең мөһимлеген юғалтмай.

Ролле уйындағы өйрәткәндә, өлкәндәр төп рольде үҙҙәренә алалар (мәҫәлән, табип ролен), ә баланы өҫтәмә рольгә йәлеп итәләр (ауырыу). Шунан һуң улар урындарын алмашалар: бала - төп ролдә, ата - әсә - өҫтәмә ролдә. Ә инде бала үҙ аллы уйынсыҡтар менән уйнағанда диалог ҡорорға ынтыла, үҙенең партнеры менән рольгә инеп аралаша.

Дөрөҫ йүнәлештә уйындар менән идара иткәндә, бала иптәштәре менән бик тиҙ контакт таба һәм үҙ-ара ыңғай мөнәсәттәр формалаша.

Балаһының иптештәре менән уйынын күҙәтеү һөҙөмтәһендә ата-әсәләр уның ролде үҙләштереү күрһәткесен билдәләй алалар:

1. Уйын эшмәкәрлегендә бала үҙ аллы үҙенә алған ролдең уға ғына хас эш - хәрәттәрен башҡара.

2. Телмәре ҡурсаҡтарға йәки иптәштәренә - уйын персонаждарына йүнәлтелгән.

3. Үҙенең  ролен партнерына әйтеп биреү мөһим.

4. Аралашыу диалог формаһында бара.

5. Уйын эпизодтары бик əҙ ваҡытлы, улар йыш алмашып торалар.

6. Уйын барышында алмашсы уйынсыҡтар индерелә.

Ғаиләлә уйындар ойоштороу өсөн тиҫтер балалар булмаһа, ата-әсәләр режиссер уйындарына мөрәжәғәт итә алалар.

Бындай уйындар күҙ алдына килтереп йәки уйлап сығарылған ситуациаларҙан килеп сығалар, ул ваҡытта бала үҙенә бер ниндәй ҙә ролде алмай. Мәҫәлән, бала өҫтәл буйлап кубикты йөрөтә.

Әгәр ҙә бала уны кубик тип ҡабул итһә, ул уйын булмай, ә предмет менән эш итеү генә була. Әгәр бала уны икенсе төрлөрәк йөрөтһә, берәй ниндәй тауыш сығарһа (мәҫәлән, мотор тауышы), ул ваҡытта кубик уның ҡулында машина,йәки тракторға әүерелә. Тимәк, һеҙҙең балағыҙ режиссер уйынын үҙләштерө. Ул машина һымаҙ геүләй, ниндәйҙер персонаж булып һөйләшә, ләкин ул был персонаж да, машина ла булмай.

Режиссер уйындарын ойоштороу өсөн «зоопарк» тибындағы ваҡ уйынсыҡтар, әкиәт персонаждары яҡшы башланғыс булып торалар. Балаға улар менән нисек уйнарға, һәр персонж исеменән монолог һәм диалогик телмәргә яйлап күсергә өйрәтерг кәрәк.